*Зөһрә* АЛТЫНБАЕВА

# ИЖАД ДАРМАНЫ КӘМЕМӘҺЕН



Ләмәҙтамаҡ урта мәктәбенең 65 йыллыҡ юбилейына арналған осрашыу кисәһе бара. Сәхнәгә осоп тигәндәй сәстәренә сал ҡунған ағай күтәрелде. Һәр хәрәкәте олпат та, баҫалҡы ла, тәьҫирле лә. Тәүҙә ун һигеҙ йәшлек егеттәрҙәй өҙә баҫып бейеп алды, шунан йырлап ҡыуандырҙы, шиғырҙарын да һөйләп ишеттерҙе. Тамашасылар уны алҡышҡа күмде.

Башҡортостандың халыҡ артисы Мулланур Ниғмәтуллин ине ул. Мәсетле районының Йонос ауылы егете ошо мәктәпте тамамлаған. Сәхнәгә тәүге аҙымын да ошо осорҙа яһай ул. 1962 йылда уҡыусыларҙы район мәҙәниәт йортона смотр-конкурсҡа йыялар. Ошонда күрәләр ҙә инде уның артислыҡ һәләтен. Шул уҡ йылда Мулланур ағай Өфөләге сәнғәт училищеһының театр бүлегенә уҡырға инә. Дүрт йыл уҡыған егетте район һорауы буйынса мәҙәниәт йортона художество етәксеһе итеп эшкә ҡайтаралар. Ул саҡта мәҙәниәт йортоноң директоры Рикза Әмиров менән бергәләшеп бик матур эшләп китәләр.

Шулай ҙа күңеле ҙур сәхнәгә ынтыла егеттең. Йыл ярым эшләгәндән һуң Мулланурҙы Сибай театрына эшкә саҡыралар. Хәҙер бына өс тиҫтә йыл ошо театрҙа ижад итә.

Театрҙағы тәүге ролен әле лә яҡшы хәтерләй халыҡ артисы — Нәжип Асанбаевтың «Тылсымлы алҡалар» драмаһында Ғәбдрәшит әфәнде роле була ул. Күп тә үтмәй, театр труппаһы гастролгә сығып китә.

— Остаздарымдан бик уңдым, — тип хәтерләй Мулланур ағай. —Уҡыған ваҡытта уҡ Башҡортостандың сәнғәт һәм сәхнә оҫталары Лек Вәлиев, Илшат Йомағолов, Хәмит Яруллин, Зәйтүнә Бикбулатовалар беҙгә сәхнә серҙәренә төшөнөргә ярҙам итте. Сибай театрына килгәс, Фәтхелислам Ғәләүетдинов, Рафаэль Әйүповтар етәкселегендә эшләүе еңел булды.

Миңә үҙем теләгән байтаҡ ролдәрҙе башҡарыу бәхете тейҙе. Ышанып тапшырған ролдәрҙе атҡарып сыҡтым, тип уйлайым. Тағы ла бер үҙенсәлек бар: роль оҡшаймы-оҡшамаймы, артист уны оҫта уйнарға тейеш.

Мулланур ағай ижадында тап ошо ҡағиҙәгә таянып эшләй. Уға донъя һәм рус классикаһы, республикабыҙ яҙыусыларының әҫәрҙәре буйынса ҡуйылған бик күп спектаклдәрҙә уйнау бәхете тейҙе. Шулай ҙа комедия жанрын айырыуса үҙ итә актер. Комедия жанры иң ауырҙарҙың береһе. Унда һәр осраҡҡа үҙенде ҡулайлаштырырға, эҙләнергә, үҙеңде тамашасы күңеленә хуш килерлек алымдар эҙләргә мәжбүр итергә кәрәклеген Мулланур ағай күптән төшөнгән. Шуға ла уның комик ролдәре үтә лә ихлас булыуы менән айырыла.

Әлбиттә, актер бөтә жанрҙа ла үҙ көсөн һынап ҡарарға тейеш. Өс тиҫтә йылдан ашыу ижад ғүмерендә халыҡ артисы Мулланур Ниғмәтуллин 70-тән ашыу ролде сәхнәгә алып сыҡҡан. Уларҙың һәр береһе бала кеүек ҡәҙерле актерға. Тамашасылар иһә актерҙың телгә һаҡсыл мөнәсәбәтен, юморҙы үҙ итеүен баһалай. «Ҡоҙаса» музыкаль комедияһындағы хәҙрәт ролен башҡа актер башҡарыуында күҙ алдына килтереүе ҡыйын. Киң диапазонлы артистың өр-яңы образдарынан Р.Ҡол-Дәүләт пьесаһы буйынса ҡуйылған «Тышаулы өйөр»ҙә өйөрҙөң аҡылын, сыҙамлылығын туплаған Алаша образын, Таңсулпан Ғарипованың «Бәхеткә ҡасҡандар» фантасмагорияһындағы Баязитты күрһәтергә кәрәк.

Актер тормошо еңел түгел. Әммә Мулланур Әбделхәй улы үҙенең ғүмерен театр сәнғәтенә арнауына үкенмәй. Тормоштоң, ижадтың шатлыҡтарын да, ҡайғыларын да үҙ итеп йәшәй. Барса халыҡ ихлас үҙ иткән, һәр саҡ көтөп алған данлыҡлы Сибай театрының халыҡ артисы әле лә дәртләнеп ижад итә, киләсәктә лә ошо сәхнәлә өр-яңы образдар ижад итеү ҡомары менән янып йәшәй. Ижад дарманың һис тә кәмемәһен, абруйлы яҡташыбыҙ.